# МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

**Башҡорт телен үҫтереүҙә белем биреү эшмәкәрлеге системаһын камиллаштырыу һәм рухи - патриотик тәрбиә биреү буйынса проект эше:**

# ХАЛҠЫМ ТАРИХЫ – ТӘРБИӘ НИГЕҘЕ







## Йөкмәткеһе

- Инеш һүҙ
- Проекттың актуаллелеге
- Проекттың маҡсаты һәм бурыстары
- Көтөлгән һөҙөмтә
- Проект барышында эшмәкәрлек төрҙәре
- Проектты тормошҡа ашырыу планы:
    - Әҙерлек этабы
    - Тормошҡа ашырыу этабы. Практик эш
    - Йомғаҡлау этабы
    - Ҡулланылған әҙәбиәт

**Проект темалары:**

1. “Минең тамырҙарым”
2. “Ете ҡыҙ” легендаһы
3. “Онотола барған башҡорт халыҡ уйындары”
4. “Башҡорт халҡының аш – һыуы”
5. “Башҡорт халыҡ шөғөлө – солоҡсолоҡ”
6. “Башҡорт халыҡ шөғөлө – йылҡысылыҡ”
7. “Башҡорт халыҡ милли кейемдәре”
8. “Башҡорт халыҡ шөғөлө – балыҡсылыҡ”

**Инеш һүҙ:**

Халҡыбыҙ элек – электән йәш быуынды иманлы, әҙәпле, тәртипле, көслө рухлы итеп тәрбиәләүҙе иң элек маҡсат итеп ҡуйған. Әҙәплелек, ихтирамлылыҡ, сабырлыҡ кеүек гүзәл тойғолар барыһы ла балала – изгелек тәрбиәләүгә йүнәлтелгән. "Изге күңелле бул, кешеләргә изгелек ҡыл!" - фәҡәт ошо йүнәлештә тәрбиәләнгән бала ғына әҙәпле, тәрбиәле һаналған.

Хәҙерге заманда кескәйҙәргә иман, әҙәп, тәртип ҡанундарына бәйле тәрбиәүи саралар ойоштороу, уларҙың милли аң кимәлен үҫтереү, халҡыбыҙ тарихын, йолаларын өйрәтеү, көнкүреше, йәшәү рәүеше менән таныштырыу мөһим. Һуңғы ваҡытта күҙәтелгән рухи ярлылыҡ, үҙ иленден тарихын, тамырҙарынды белмәү, тыуған теленде һанға һуҡмау ғәҙәти күренешкә әйләнеп бара.

Илебеҙҙә барған үҙгәрештәр балалар баҡсаһы алдында ла яңы маҡсаттар ҡуя. Белемле, ҡыҙыҡһыныусан, төплө фекер йөрөтөүсе, үҙаллы бала тәрбиәләү – беҙҙең төп бурыс. Шул уҡ ваҡытта тәрбиә нигеҙҙәре халыҡ мираҫына, мәҙәниәтенә таянып алып барылырға икәнлеген оноторға тейеш түгелбеҙ. Шуның өсөн, мәктәпкәсә йәштәге балаларға башҡорт халҡының бай тарихы, йолалары, йәшәү тамырҙары тураһында мәғлүмәт биреү зарур. Был изге эште кесе йәштән үк башлау мөһим. Киләсәктә бала йәмғиәттең тулы хоҡуклы ағзаһы булараҡ халыҡтың мәҙәни мираҫын үҙләштереп, һаҡлап, үҫтереп киләсәк быуынға тапшырһа, быуындар бәйләнеше юғалмаҫ.

**Актуаллелеге:**

Кескәй баланың эске донъяһы формалашыуында, быуаттар аша һаҡланып килгән йола байрамдары, милли уйындар, халыҡ ижады ҙур роль уйнай. Ошо күҙлектән сығып, беҙҙең балалар баҡсаһында нәҫел – ырыу тамырҙарын, халыҡтың кәсеп – шөғөлөн, мәҙәниәтен, тыуған ер - һыу атамаларының килеп сығыу тарихын өйрәнеүгә, онотола барған халыҡ уйындарын тергеҙеүгә арналған проект эшмәкәрлеге юҡка ғына алынманы. Әйтергә кәрәк, был проект эштәре ата – әсәләр менән балалар

баҡсаһы араһында тығыҙ бәйләнеш булдырыуҙа, тәрбиә эшен бергә алып барыуҙа ҙур һөҙөмтә бирә. Бигерәк тә, хәҙерге заман ата-әсәһенең күп ваҡытын эштә үткәреү һөҙөмтәһендә, балаһына ентекле иғтибар етмәгән осорҙа - был бик актуаль.

Ошо юҫыҡтан сығып алынған проект эштәре төрлө темаларға алынды. Әйтергә кәрәк, башҡорт халҡының кәсеп - һөнәрҙәренә, шөғөлөнә арналған эштәр балаларҙа ла, ата-әсәләрҙә лә бик ныҡ ҡыҙыҡһыныу уятты. Халыҡтың борондан килгән йылҡысылыҡ, солоҡсолоҡ, малсылыҡ, умартасылыҡ кеүек киң тармаҡлы кәсептәре үҙенә ҙур иғтибар йәлеп итте. Проектты тормошҡа ашырыу барышында бик күп файҙалы, йөкмәткеле материал тупланды, төркөмдәрҙә үҫтереүсе - предметлы үҫеш мөхите байытылды, яңы материалдар менән тулыландырылды. Ә тыуған яҡ легендаларын, ер – һыу атамаларын өйрәнеүгә маҡсат итеп ҡуйылған проект эштәре балаларҙа тәбиғәткә һөйөү, һаҡсыл ҡараш уятты. Ғөмүмән, тәбиғәт ҡомартҡылары менән танышыу баланың хәтерендә бик оҙаҡ һаҡлана һәм, иң мөһиме, балала үҙ иленә ҡарата һөйөү, ғорурланыу хисе уята.

Билдәле, балалыҡ осоронда тәрбиә эшен уйынһыҙ күҙ алдына ла килтереп булмай. Быны ата-әсәләр ҙә, тәрбиәселәр ҙә яҡшы белә. Ысынлап та, бала өсөн уйын-эшмәкәрлеге - ул ысынбарлыҡ. Уйында бала йәшәй, сынығa, үҙаллылыҡҡа өйрәнә. Тик һуңғы йылдарҙа халыҡ уйындары онотолоп бара, ә бит быуындан - быуынға тапшырылып, әлегә тиклем һаҡланып килгән халыҡ уйындарына иғтибар итһәң, улар халыҡтың уҙған тормошон, мәҙәниәтен, көнкүрешен күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итә. Башҡорт халыҡ уйындарында халыҡтың асылы, йәшәү рәүеше, хеҙмәте, донъяға булған ҡарашы сағыла. Халыҡ уйындарының әһәмиәте, уларҙың йәш быуынды тәрбиәләүҙә тоткан урыны баһалап бөткөһөҙ. Кескәйҙәр халыҡ уйындары аша ата-бабаларыбыҙҙың әхлаҡи һәм рухи тормошона, үткәне һәм бөгөнгө йәшәйешенә хөрмәтле ҡарашлы булып тәрбиәләнә. Шулай уҡ уйындар кескәйҙәрҙән ихтыяр көсө, сыҙамлылыҡ, ныҡышмалылыҡ талап итә, хеҙмәт һөйөүсәнлек тәрбиәләй.

Үҙебеҙҙең уйындарҙы уйнап үҫкән балалар изге күңелле, татыу, берҙәм булыуға өмөт уята.

Халҡыбыҙҙың тарихын, милли ғөрөф – ғәҙәтен, бай ауыҙ – тел ижадын бергәләп өйрәнеүҙә, балаларҙы юғары аң – белемле, мәҙәниәтле, иманлы, тәртипле, көслө рухлы, үҙ иленең патриоты итеп тәрбиәләүҙә был методик ҡулланма ҙур ярҙам булыр тип ышанабыҙ.

**Проектта ҡатнашыусылар**: тәрбиәселәр, тәрбиәләнеүселәр, ата - әсәләр (законлы вәкилдәр).

**Маҡсат:**

башҡорт халыҡ ижады, көнкүреше, аш – һыуы, милли кейемдәре, кәсептәре һәм шөғөлдәренә арналған проект эшмәкәрлеге аша балаларҙа милли уҙаң, рух нигеҙҙәре формалаштырыу, туған телгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү.

**Бурыстар:**

- башҡорт халыҡ ижады менән таныштырыу, халыҡ көнкүреше һәм тарихы тураһында белемдәрен камиллаштырыу;
- башҡорт биҙәү - ҡулланма сәнғәтенә, башҡорт милли кейемдәренә, аш – һыуына, кәсептәренә ҡыҙыҡһыныу уятыу;
- халыҡ мәҙәниәтенә, сәнғәтенә, ижадына, көнкүрешенә ҡарата һөйөү тәрбиәләү;

**Көтөлгән һөҙөмтә:**

“Минең тамырҙарым”, “Ете ҡыҙ” легендаһы”, “Башҡорт халыҡ шөғөлө – йылҡысылыҡ”, “Башҡорт халыҡ шөғөлө - солоҡсолоҡ” ,“Башҡорт халыҡ шөғөлө - балыҡсылыҡ”, “Башҡорт халҡының аш – һыуы”, “Башҡорт халҡының милли кейемдәре”, “Онотола барған уйындар” проектын тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә балаларҙа милли үҙаң уятыу, патритик рухлы йәш быуын тәрбиәләү, “Мин- башҡорт балаһы” – исемле байрам сараһы ойоштороу.

**Проект барышында эшмәкәрлек төрҙәре :**

- хеҙмәт эшмәкәрлеге;
- эҙләнеү - тикшеренеү эшмәкәрлеге;
- уйын эшмәкәрлеге;

- ижади эшмәкәрлек;
- хәрәкәт эшмәкәрлеге;
-нәфис әҙәбиәт һәм фольклорҙы ҡабул итеү эшмәкәрлеге;
- коммуникатив эшмәкәрлек;
- музыка эшмәкәрлеге;
- танып белеү эшмәкәрлеге;
- һүрәтләү эшмәкәрлеге;
- конструкторлау эшмәкәрлеге.

## Проектты тормошҡа ашырыу планы:

**I этап. Әҙерлек этабы.**

**Маҡсат:** проект темаһын һайлау, план төҙөү, кәрәкле материалдар туплау.

**II этап. Тормошҡа ашырыу этабы.Практик эш.**

**Маҡсат:**проект эшен планға ярашлы тормошҡа ашырыу.

**III этап.**

**Йомғаҡлау этабы.** Проект презентацияһын эшләү, үҫтереүсе предметлы мөхит булдырыу.

## 1. “ МИНЕҢ ТАМЫРҘАРЫМ”

**Инеш һүҙ:**

Бөйөк шәхесебеҙ З.Вәлидиҙең башҡорт халҡына хушлашыу хатында шундай юлдар бар: “Беҙҙең милләтебеҙ аҡтамыр киҫәге кеүек, тупраҡ араһында бәләкәй генә киҫәк ҡалһа ла, яңынан терелеп бөтөн баҡсаға таралыр”.

Башҡорт халҡы борондан үҙенең тамырын, быуынын өйрәнеүгә бик ҙур урын билдәләгән, бер - береһенә быуындар тарихын тапшырып барыр булған. Элек башҡорттар ата-бабаларының исемдәрен 10-15 быуынға тиклем белергә тейеш булған.

Шәжәрә ғәрәп телендә –“ағас” тигән һүҙ. Шәжәрә - ул ырыу тарихы. Борон башҡорттар ырыу - ҡәбиләләргә бүленеп йәшәгән. Һәр ырыуҙың үҙ исеме булған. Башҡорт халҡы элек-электән үҙ ырыуының тарихын яҙып ҡалдыра барған. Шәжәрәлә бөтә ир-ат исемдәре күрһәтелгән**.** Беҙҙең олатайҙарыбыҙ ырыу-бабаларҙың исемдәрен ағас рәүешендә тармаҡландырып яҙа барған. Ни өсөн ағас? Башҡорт халҡында ағас күкте (һауа), ерҙе һәм ер аҫтын символлаштырған. Ағас-кеше ғүмеренең күрһәткесе лә булған:

ағастың тамыры - үткәне

ағастың һыны - хәҙергеһе

ағас ботаҡтары - киләсәге

Әлбиттә, ғаиләлә баланың тормошо башлана, бында ул шәхес булып үҫешә. Ғаилә - бер - береһенә ихтирам, берҙәмлек, яҡынлыҡ, һөйөү сығанағы. Һәр ябай ғына ойошма ла кешеһеҙ тормош кисерә алмай.

**Актуаллелеге:**

Хәҙерге заманда үҙ нәҫелеңде белеү бик актуаль мәсьәлә. Һәр балаға үҙенең үткәнен, тамырының килеп сығыу тарихын, олатай, өләсәйҙәренең кем булғанын, уларҙың ҡайҙа йәшәгәнен белеү мөһим. Ҡайҙа минең туғандарым төйәге? Был һорау бер ҡарамаҡтан бик ябай ғына, әммә ул бик ҙур мәғәнәне үҙ эсенә ала. Балаға үҙенең тамырын белергә ҡыҙыҡһыныу уятыу - һәр ата-әсәнең бурысы. Был белем балаға үҙ - үҙен аңларға,

бөгөнгөһөнә, тамырҙарының үткәненә баһа бирергә, ғаилә ҡиммәттәрен үҫтерергә ярҙам итә.

**Проекттың төрө:** эҙләнеү – тикшеренеү, ижади.

**Тормошҡа ашырыу осоро:** уртаса ваҡытлы (сентябрь-декабрь).

**Проекттың әһәмиәте**: һәр ғаилә үҙ быуынын, тарихын өйрәнә.

**Проектта ҡатнашыусылар:** балалар, тәрбиәселәр, музыка етәксеһе, ата-әсәләр (законлы вәкилдәр).

**Маҡсат:**

- балала "ғаилә", "шәжәрә", "тамыр" төшөнсәһен формалаштырыу, тормошта шәхес булып үҫеүендә ғаиләнең ролен, ғаилә ҡиммәтен үҫтереү, ғаиләгә ҡыҙыҡһыныу үҫтереү;

**Бурыстар:**

***Балалар өсөн:***

-ғаилә, туғанлыҡ төшөнсәһе тураһында күҙаллауын камиллаштырыу;

-ғаиләнең тарихын, үткәнен, йолаларын өйрәнеүгә ынтылыш булдырыу;

-оло йәштәгеләргә ихтирамлы ҡараш формалаштырыу;

-ғаилә, фамилия өсөн ғорурлыҡ тойғоһо, тыуған йортона һөйөү тәбиәләү;

***Ата - әсәләр өсөн:***

- шәжәрә, тарих тураһында белемдәрен арттырыу;

-ғаиләләр араһында партнерлыҡ, аралашыу, шәхси үҫеш формалаштырыу;

- "Шәжәрә ағасын" төҙөү;

-балаларҙың теләген тормошҡа ашырыуҙа булышлыҡ итеү;

***Педагогтар өсөн:***

- проект буйынса план төҙөү;

-проектҡа ярашлы үҫтереүсе предметлы мөхитте байытыу;

- күргәҙмә материалдар туплау;

-"Минең тамырҙарым" тип исемләнгән шәжәрә байрамын ойоштороу.

**Көтөлгән һөҙөмтә:**

- бала үҙенең ғаиләhе, туғандары, тамыры, ғаиләнең ғөрөф - ғәҙәттәре тураhында күберәк мәғлүмәт ала;

- бала шәжәрәhен белә, туғанлыҡ төшөнсәhен тәрәнерәк ҡабул итә;

- ата-әсәләр менән баланың быуындар бәйләнеше нығына;

- ата-әсәләргә мәғлүмәт hәм практик тәжрибә тупларға ярҙам итә;

**Проектты тормошҡа ашырыу формалары**:

- Ата – әсәләр (законлы вәкилдәр) менән дискуссия ойоштороу;
- нәфис әҙәбиәт уҡыу;
- музыкаль күңел асыуҙар, иртәлектәр;
- ғаилә менән бәйле фотоhүрәттәр, альбомдар ҡарау;
- ижади эшмәкәрлек (hүрәт төшөрөү, ҡорама йәбештереү h.б);
-“Шәжәрә ағасын” өйрәнеү, эҙләнеү,төҙөү (ата- әсәләр hәм баланың берлектәге эше);
- күргәҙмә- “Шәжәрә ағасы”.

**Проектты тормошҡа ашырыу этаптары:**

**I этап.** Проекттың әҙерлек этабы (сентябрь-октябрь)

**Ойоштороу, әҙерлек эштәре:**

**Тәрбиәселәр:**

- проекттың маҡсатын, бурыстарын билдәләү;
- эш планы төҙөү;
- методик әсбаптәр туплау;
- әҙәби әҫәрҙәр, hүрәттәр hайлау.

**Музыка етәксеhе:**

- проект темаhы буйынса йырҙар, бейеүҙәр әҙерләү;

**Ата-әсәләр:**

- тема буйынса нәфис әҙәбиәт уҡырға тәҡдим итеү;
- “Шәжәрә ағасын” өйрәнеү өсөн тәҡдимдәр биреү;
- ата-әсәләр менән шәхси әңгәмәләр;

**II этап.** Проекттың төп өлөшө (ноябрь - ғинуар)

**Проектты тормошҡа ашырыу планы**

| **Белем биреү** | **Балалар менән эшләү өсөн эш** | **Ата-әсәләр** |
|---|---|---|

| өлкәләре | формалары | менән эшмәкәрлек |
|---|---|---|
| Танып белеү | *Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге:* “Минең ғаиләм”, “Минең йортом - минең ғаиләм”, “Ғаиләлә ир егет һәм ҡатын – ҡыҙ”, “Атайым хәстәрләүсе”, “Әсәйем тураһында”, “Өләсәйем һандығы” һ.б. | Балалар менән ғаилә фотоальбомдары төҙөү |
| Телмәр үҫеше | *Ижади һөйләү:* <br>- “Мин өйҙә нисек ярҙамлашам?”, “Минең ғаиләм”, “Әсәйем, берҙән берем”, “Өләсәйем һәм картатайым” һ.б. <br>- Ғаилә фотоларын ҡарау, һүрәтләү хикәйәһен төҙөү; <br>- “Ғаилә” һ.б. сюжетлы һүрәттәр буйынса хикәйә төҙөү; <br>- Ғаилә темаһы буйынса әйтемдәр, мәҡәлдәр, йомаҡтар өйрәнеү; | Балаларҙы ижади һөйләргә өйрәтеү: “Минең ғаиләм”, “Минең әсәйем, атайым”, “Минең өләсәйем, олатайым” Ғаиләгә ҡағылышлы мәҡәлдәр өйрәнеү |
| Художестволы эстетик үҫеш | *Һүрәт төшөрөү*: <br>- “Минең ғаиләм”, “Иң шәп атай”, “Әсәйем портреты”, “Әсәйемә сәскә гөлләмәһе”, “Минең | -“Шәжәрә ағасы” эшләү; <br>-“Минең шәжәрәм”, |

| | | |
|---|---|---|
| | ғаиләм” һ.б.<br>*Әүәләү:*<br>- “Өләсәйем әкиәттәре”, “Әсәйемә сәскәләр” һ.б.<br>*Корама йәбештереү:*<br>- “Өләсәйгә түшелдерек”, “Әсәйемә бүләк”,“Беҙҙең баҡса” һ.б.<br>*Музыкаль эшмәкәрлек:*<br>- ғаилә тураһында йырҙар өйрәнеү: “Мин үҙемде яратам”, “Әсәйем”,”Шәп минең атайым” һ.б. | “Минең ғаиләм”, “Бына ниндәй әсәйем!”, “Ғаилә портреты”- күргәҙмә ойоштороу |
| Социаль-коммуникатив үҫеш | *Әңгәмәләр:*<br>- “Минең ғаиләм”, “Ғаиләлә үткәрелгән байрамдар”, “Минең туғандарым”, “Бергә бик күңелле”, “Ололарҙы ололай беләһеңме?”, “Ағас тамыры менән кеше ғаиләһе менән ныҡ” һ.б.<br>*Сюжетлы-ролле уйындар:*<br>- ”Әсәй һәм ҡыҙ”, “Ғаилә”, “Ғаилә байрамы”, “Матурлыҡ салоны”, “Театр” һ.б.<br>*Дидактик уйындар*:<br>- “Ҡыҙ һәм малай”,“Иркәләп әйт”, “Әсәйҙең ярҙамсылары”, “Әсәй ниндәй була?”, “Туғандарын тап”, “Ғаилә ағзаларын һүрәтлә”, “Кем булырға?”, “Һөнәрҙе | Ғаиләләр менән осрашыу<br><br>Сюжетлы-ролле уйындарға атрибуттар әҙерләүҙә ҡатнашыу<br><br>“Татыу ғаилә- донъя тотҡаһы!” байрамы үткәреү |

| | | |
|---|---|---|
| | әйт”һ.б.<br>*Хеҙмәт эшмәкәрлеге:*<br>- Атайҙар, әсәйҙәр көнөнә бүләк әҙерләү; | |
| Физик үҫеш | *Бармаҡ уйындары*:<br>- “Ғаилә”, “Беҙҙең дуҫ төркөм”, “Бармаҡ – малай”, “Әсәйемде яратам”, “Бесәйҙең ҡыҙҙары”, “Оялағы ҡошсоҡтар” һ.б.<br>- Хәрәкәтле уйындар: атайҙар менән ярыш уйындары, эстафета “Әсәйемә гөлләмә” һ.б. | Байрамдарҙа, күңел асыуҙарҙа әүҙем ҡатнашыу |

**III этап. Йомғаҡлау этабы (февраль)**

- балаларҙың һүрәттәренән күргәҙмә “Минең ғаиләм”, “Бына ниндәй әсәйем!”, “Ғаилә портреты”;
- презентация “Ғаилә ағасы”;
- проектка йомғаҡ яһау, ата-әсәләр менән берлектә “Минең тамырҙарым” күңел асыу сараһы;

## 2.“ЕТЕ ҠЫҘ”ЛЕГЕНДАҺЫ

Һауаларҙа ете йондоҙ - ете ҡыҙ,
Ерҙә шатлыҡ бейей- ете ҡыҙ,
Етегәнден ете ҡуҙынан
Беҙ, башҡорттар, тыуған ырыуҙан.
Р.Шәкүр

Еребеҙгә сит ҡәүем баҫҡынсылары килеп бер - береһенә оҡшаған бер туған ете ҡыҙҙы ҡаҙаҡ далаларына урлап алып киткәс, улар табандарын ярып ҡыл һалыныуға ҡарамаҫтан, урман - тау араһына ҡасып, тыуған яҡтарына юллана. Арттарынан ҡыуа төшкәс, ҡыҙҙар тотҡонлоҡтан үлемде өҫтән күреп, етәкләшеп, юлда тап булған йылғаға инеп юғала. Уларҙың фажиғәле вафатынан һуң күктә ете йондоҙ — Етегән ҡабына. Ошо тетрәндергес хәлде халыҡ “Ете ҡыҙ” йырына һала. Һуңғараҡ ул тарихи бейеү булып сәхнәләргә күтәрелә, шиғыр, әкиәттәр рәүешендә китап итеп яҙыла. Етегән йондоҙ - ете ҡыҙ.

Ете ҡыҙҙың саялығына, ҡыйыулығына, үҙ халҡына һәм еренә тоғрологона дан йырлаған был легенда бөгөн дә халыҡ тарафынан ҙур теләк менән өйрәнелә.

Республиканың баш ҡалаһы Өфөлә “Ете ҡыҙ” фонтаны- башҡорт халыҡ легендаһына нигеҙләнеп эшләнгән фонтан асылды. Уның диаметры - 18 метр. Авторы - Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған рәссамы, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты скульптор Хәниф Хәбибрахманов.

**Актуаллелеге:**

Ҡыҙғаныска ҡаршы халыҡ араһында элек - электән килгән легендалар онотола бара. Күптәр легендалар тураһында әҙ белә. Хәҙер кескәйҙәр генә түгел, ә ата – әсәләр ҙә күпселек интернет селтәрендәге хәҙерге заман мәғлүмәттәре генә ҡыҙыҡһындыра, ошоларҙан сығып балаларҙың ғына түгел, ә ата - әсәләрҙең дә башҡорт халҡының легендалары тураһында етәрлек кимәлдә белмәүҙәре күңелде ҡыра һәм үҙ халҡындың легендаларын

белеү, башҡорт бейеүҙәренең барлыҡҡа килеү тарихын өйрәнеү һәм уларҙы быуындан - быуынға тапшырыу, тыуған илдең тарихына һөйөү - тәрбиәләү төп маҡсат итеп алынды.

**Проекттың төрө**: ижади, мәғлүмәти.

**Үткәреү ваҡыты**: оҙайлы.

**Проектта ҡатнашыусылар**: тәрбиәселәр, тәрбиәләнеүселәр, ата - әсәләр (законлы вәкилдәр).

**Маҡсат:**

Башҡорт халыҡ легендаһының тарихын өйрәне1, башҡорт халҡының биҙәү - ҡулланма сәнғәтен тергеҙе1.

**Бурыстар:**

- башҡорт халҡының “Ете ҡыҙ” легендаһының тарихы тураһында белемен камиллаштырыу;

- башҡорт биҙәү - ҡулланма сәнғәтенә, башҡорт милли кейемдәренә ҡыҙыҡһыныу уятыу;

- халыҡ мәҙәниәтенә ҡарата һөйөү тәрбиәләү;

**Көтөлгән һөҙөмтә:**

- башҡорт халыҡ милли кейемдәрендә “Ете ҡыҙ” ҡурсаҡтары әҙерләү һәм күргәҙмә ойоштороу;

**Башҡа эшмәкәрлек төрҙәре менән бәйләнеш:**

- хеҙмәт эшмәкәрлеге;
- эҙләнеү - тикшеренеү эшмәкәрлеге;
- уйын эшмәкәрлеге;

Проектты тормошҡа ашырыу планы:

**I этап. Әҙерлек этабы.**

**Маҡсат:** проекттың планын төҙөү, кәрәкле материалдар туплау.

Үтәсәк саралар:

- ата - әсәләр йыйылышын үткәреү, проект төҙөү;
- “Ете ҡыҙ” легендаһы, башҡорт милли кейемдәре менән танышыу;
-ҡурсаҡтарҙы кейендереү өсөн материалдар туплау.

**II этап. Тормошка ашырыу этабы.Практик эш.**

**Проектты тормошка ашырыу планы:**

## Ата – әсәләр менән берлектә эшмәкәрлек.

| № | Эш йөкмәткеһе | Тормошҡа ашырыу юлы | Үтәү ваҡыты |
|---|---|---|---|
| 1 | Дискуссия | -“Башҡорт милли ҡатын - ҡыҙҙар кейеме”;<br>-“Түшелдерек төрҙәре”;<br>-“Милли биҙәүестәр” һ.б. | Ғинуар - май |
| 2 | Виртуальэкскурсия | Тема: “Ете ҡыҙ фонтаны” | Март |
| 3 | Онлайн оҫталыҡ классы | “Башҡорт биҙәүестәре тегеү серҙәре” | Апрель |
| 4 | Хеҙмәт эшмәкәрлеге | -ата - әсәләрҙең интернет селтәрҙәре менән бәйләнеше: башҡорт халыҡ биҙәү – ҡулланма сәнғәте менән танышыу;<br>- ҡурсаҡты биҙәү буйынса тәҡдимдәр;<br>- күлдәктәр тегеү;<br>-биҙәүестәр әҙерләү;<br>-биҙәлгән ҡурсаҡтарҙы ҡуйыу өсөн аҫлыҡтар эшләү; | Ғинуар - май |
| 5 | Квест уйын | Тема: “Башҡортостан легендалары буйлап сәйәхәт” | Февраль |

## Балалар менән берлектә эшмәкәрлек

| № | Белем биреү өлкәләре | Тормошҡа ашырыу юлы | Үтәү ваҡыты |
|---|---|---|---|
| 1 | Танып белеү | **Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге:**<br>-“Минең матур ҡурсағым”,<br>-“Башҡорт күлдәге,” | Ғинуар - май |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | -“Сыңлай үрместәр” һ.б.<br>**Тирә – йүн менән таныштырыу:**<br>-Музейға экскурсия<br>-Китапханаға экскурсия<br>-Виртуальэкскурсиялар<br>**Эҙләнеү – тикшеренеү:**<br>-“Төҫлө таштар”,<br>-“Нимә ауыр” һ.б.<br>**Видео** яҙмалар ҡарау,<br>**Аудио** яҙмалар тыңлау | |
| 2 | Телмәр үҫеше | **Нәфис әҙәбиәт:**<br>**Башҡорт халыҡ легендаларын 0йр2не1:**<br>-“Етегән йондоҙ - ете ҡыҙ”,<br>-“Кылтабан күле”<br>**Шиғырҙар:**<br>“Минең ҡурсағым” (Э.Абдуллина), “Ҡурсаҡ” (Н.Хамбалеева),<br>“Ҡурсағым” (З.Акбутина),<br>“Үҙем тектем” (А.Игебаев) һ.б.<br>-Йомаҡтар сисеү (тән өлөштәре, өҫ кейемдәре тураһында),<br>**Башҡорт фольклоры:**<br>-“Бишек йыры”,<br>-Әүрәткестәр һ.б. | Ғинуар - май |
| 3 | Художестволы эстетик үҫеш | **Һүрәт төшөрөү:**<br>-“Япмалы башҡорт күлдәге”<br>-“Тәңкәле камзул”,<br>-“Башҡорт ҡыҙҙарының кейеме”һ.б.<br>**Әүәләү:** | Ғинуар - май |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | “Ете ҡыҙ” фонтаны”,<br>**Ҡорамалар йәбештереү:**<br>-“Камзулды биҙә”,<br>-“Күлдәктең таҫмалары”,<br>-“Ҡурсаҡҡа ҡашмау”<br>**Музыкаль эшмәкәрлек:**<br>“Ете ҡыҙ” көйөн тыңлау, бейеүен ҡарау | |
| 4 | Социаль - коммуникатив үҫеш | **Дискуссия:**<br>-“Ете ҡыҙ”,<br>-“Етегән йондоҙ ҡайҙан барлыҡҡа килгән?”<br>**Дидактик уйындар:**<br>-“Башҡорт доминоһы”,<br>-“Күлдәктең парын тап”<br>-“Башҡорт лотоһы”<br>-“Ҡурсаҡты тап” һ.б.<br>**Халыҡ уйындары:**<br>-“Тирмә”, “Ҡурай”,<br>-“Йәшерәм яулыҡ” һ.б.<br>**Хеҙмәт эшмәкәрлеге:**<br>-Тәрбиәсенең ярҙамында ҡурсаҡтың сәсенә үрместе үреү;<br>-Ҡурсаҡтарға тегелгән башҡорт күлдәктәрен, ҡашмауҙарын ҡурсаҡтарға кейҙереү һ.б.<br>**Сюжетлы ролле уйындар:**<br>-“Ғаилә”, “Магазин”, “Дауахана” һ.б.<br>**Ситуациялар:**<br>“Ни өсөн башҡорт ҡыҙҙары түшелдерек таҡҡан?” | Ғинуар - май |
| 5 | Физик үҫеш | Бармаҡ уйындары | апрель |

**III этап. Йомғаҡлау.**

-Проекттың презентацияһы;

-Башҡорт халыҡ милли кейемдәрендә “Ете ҡыҙ”курсаҡтары әҙерләү һәм күргәҙмә ойоштороу;

## 3.”ОНОТОЛА БАРҒАН БАШҠОРТ ХАЛЫҠ УЙЫНДАРЫ”

**Инеш һүҙ:**

Балаларҙы тәрбиәләүҙә уйындар айырыуса ҙур урын тота. Уйын улар өсөн донъяны танып белеү сараһы, хеҙмәт мәктәбе һәм һәр яҡлап гармониялы үҫеү сығанағы. Ысынлап та, уйнаған саҡта бала өҙлөкһөҙ хәрәкәттә була, ә был хәл инде уның бөтә яҡлап йылдам үҫеүен тәьмин итә. Был физиологик процесс булһа, балаларҙы йәмғиәтебеҙ өсөн кәрәкле кешеләр итеп тәрбиәләүҙең икенсе бер күренеше – психологик процеста уйындың айырылғыһыҙ өлөшө булып тора.

Халыҡ уйындарының быуындан - быуынға тапшырылып, әлегә тиклем һаҡланып ҡалғандарына иғтибар итһәң, улар халыҡтың уҙған тормошон, мәҙәниәтен, көнкүрешен күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итә. Шуға күрә лә башҡорт халыҡ уйындарында кешеләрҙең йәшәйеше, тормош – көнкүреше, хеҙмәте, донъяуи ҡиммәттәргә (батырлыҡ, матурлыҡ, ҡыйыулыҡ, дөрөҫлөк, сабырлыҡ, түҙемлек һ.б.) булған ҡарашы сағыла. Халыҡ уйындарының әһәмиәте, уларҙың йәш быуынды тәрбиәләүҙә тотҡан урыны баһалап бөткөһөҙ. Кескәйҙәр хәрәкәтле уйындар уйнау аша халыҡтың әхлаки һәм рухи тормошона, үткәне һәм бөгөнгө йәшәйешенә хөрмәтле ҡарашлы булып тәрбиәләнә.

Халыҡ уйындарының шундай үҙенсәлеге бар: улар ваҡыт һынауынан ҡурҡмай, оҙаҡ йылдар һуҙымына бер аҙ үҙгәреш кисерһәләр ҙә, һаман халыҡ хәтерендә һаҡланыуын дауам итә. Тик уларҙы тейешле кимәлдә өйрәнергә һәм уйнарға ғына кәрәк. Шуныһы ҡыуаныслы - уйындар тел яғынан сикләнеүгә дусар түгелдәр. Әйтәйек, башҡорт балалары уйнаған халыҡ уйындарын урыҫ, сыуаш, мари, мордва, удмурт һәм башҡа милләт халҡы балалары ла кинәнеп уйнайҙар.

**Актуаллелеге:**

Бөгөн, ҡыҙғаныусҡа ҡаршы, балалар араһында һәм ғөмүмән, халыҡ араһында элек - электән йәшәп килгән халыҡ уйындары

онотола бара. Күптәр халыҡ уйындары тураһында әҙ белә. Был күренешкә, беренсенән, балаларҙың халыҡ уйындарын белмәүе, йәки халыҡ уйындарының аҙ кимәлдә уйналыуы, балаларҙың өйҙә күберәк телевизор, компьютер алдында ултырыуы, ата – әсәләр, тәрбиәселәр менән бергәләп халыҡ уйындарын тейешле кимәлдә өйрәнеп уйналынмауы килтерә. Икенсенән, кескәйҙәрҙең иғтибарын интернет селтәрендәге замана уйындары йәлеп итә. Әлбиттә, бала төрлө яҡтан үҫешергә тейеш, әммә халыҡ уйындары беҙҙең иң ҡиммәтле мираҫтарыбыҙҙың береһе икәнен онотторға ярамай.

**Проект төрө:** ижади, мәғлүмәти.

**Үткәреү ваҡыты:** (март-ноябрь айбары)

**Проекттың әһәмиәте, мөһимлеге:**

“Онотола барған башҡорт халыҡ уйындары” проекты аша балалар, ата - әсәләр, педагогтар араһында башҡорт халҡының борон - борондан килгән хазиналарының береһе булған халыҡ уйындарын тергеҙеү.

**Проектта ҡатнашыусылар:** балалар (4 - 7 йәш), педагогтар, ата – әсәләр (законлы вәкилдәр);

**Маҡсат:**онотола барған башҡорт халыҡ уйындарын өйрәнеү, уйнатыу һәм онотола барған уйындарҙы тергеҙеү.

**Бурыстар:**

***Балалар өсөн:***

- онотола барған башҡорт халыҡ уйындарын балаларға өйрәтеү;
- хәрәкәт итеү тәжрибәһен туплау һәм физик яҡтан нығытыу;
- баланың фекерләү ҡеүәһен, хәтерен, ихтыяр көсөн үҫтереү;
- уңышҡа ирешеүҙе, үҙенең еңеүе менән ләззәтләнә белеүҙе, етеҙҙәрҙән, көслөләрҙән өлгө алыуҙы, үҙе лә беренселеккә ирешеүҙе булдырыу;
- күмәк уйындар аша дуҫлыҡ, берҙәмлек сифаттарын тәрбиәләргә булышлыҡ итеү;
- халыҡ уйындарына ҡыҙыҡһыныу уятыу.

***Ата әсәләр өсөн:***

- онотола барған башҡорт халыҡ уйындарының тарихы, үткәне һәм бөгөнгөһө тураһында мәғлүмәт биреү;

- уйындарҙың тормошта биләгән урынының әһәмиәтенең ҙурлығы тураһында аңлатыу эше алып барыу;

- баланы киләсәктә тыуған иленә һәм милләтенә ышанысло таяныс булырлыҡ шәхес, патриот итеп тәрбиәләү ҡоралы булып тороуон еткереү;

- халыҡ уйындарын ҡулланыу тәжрибәһен төрлө ысулдар аша ата - әсәләргә күрһәтеү, ҡыҙыҡһыныу уятыу.

***Педагогтар өсөн:***

- башҡорт халыҡ уйындарының тәрбиәүи әһәмиәтен асыу;

- баланың физик үҫешенә башҡорт халыҡ уйындары йоғонтоһон аңлатыу;

- халыҡ уйындарын ҡулланыу тәжрибәһен төрлө саралар аша педагогтарға еткереү, ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Көтөлгән һөҙөмтә:**

- педагогтарҙың, ата - әсәләрҙең онотола барған халыҡ уйындары менән ҡыҙыҡһыныуы, балаларҙың халыҡ уйындарын белеп уйнауҙары, тейешле кимәлдә өйрәнелеүе;

- халыҡтың уҙған тормошоноң, мәҙәниәтенең, көнкүрешенең уйындар аша күҙ алдына баҫтырылыуы;

- уйындар аша башҡорт халҡының әхлаҡи һәм рухи тормошона, үткәне һәм бөгөнгө йәшәйешенә хөрмәтле ҡарашлы булып тәрбиәләнеүе.

**Проекты тормошҡа ашырыу планы:**

**I этап.**Әҙерлек этабы:

- мәғлүмәт, методик әҙәбиәт туплау;

-педагогтарға мәғлүмәт биреү, кәрәкле материал , әҙәбиәт туплау.

| | **Тема** | **Тормошҡа ашырыу юлы** | **Үтәү ваҡыты** |
|---|---|---|---|
| 1 | “Боронғо халыҡ уйындары һәм уларҙың әһәмиәте” | Консультация<br>Оҫталыҡ класы | Март |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 2 | Онотолған уйындар тураһында мәғлүмәт биреү | Уйындарҙың әһәмиәте, тарихы һәм файҙаһы тураһында әңгәмә, дискуссия | Апрель |
| 3 | Йөн, кейеҙ туптар эшләү | Оҫталыҡ класы | Апрель |
| 4 | Уйын атрибуттарын әҙерләү | Һөйәктәр, таштар йыйыу, виртуальэкскурсиялар үткәреү. Квест уйын | Апрель - май |

**Ата-әсәләргә мәғлүмәт биреү, әҙерлек эше алып барыу**

| | Тема | Тормошҡа ашырыу юлы | Үтәү ваҡыты |
|---|---|---|---|
| 1 | “Боронғо халыҡ уйындары һәм уларҙың әһәмиәте” | Консультация | Март |
| 2 | “Халыҡ хазинаһы - уйындар” | Буклеттар эшләү;<br>“Йәш ата - әсәләр клубы” - консультация менән сығыш яһау | Апрель |
| 3 | Уйын атрибуттарын әҙерләү | Һөйәктәр йыйыу<br>Йөн, кейеҙ туптар эшләү | Май |

**II этап. Проектты тормошҡа ашырыу**

**Балалар, педагогтар менән уйындар өйрәнеү**

| | Тема | Тормошҡа ашырыу юлы уйындар | Үтәү ваҡыты |
|---|---|---|---|
| 1 | “Тылсымлы таяҡтар” | “Чижик” | Май |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | (таяҡтар менән уйындар ) | “12 таяҡ” | Июнь |
| | | “Саптырмыш” уҡтарҙан атышыу малайҙар бәйгеһе Сәкән һуғыу Бура һуғыу | Август |
| | | Себен һуғыу | Сентябрь |
| | | Бишбармаҡ | Октябрь |
| 2 | “Һөйәктәр” (һөйәк менән уйындар ) | Йәкәл һуғыу | Июнь |
| | | Ашыҡ уйыны | Август |
| | | Һаҡыташ (Биш таш) һөйәктәр йәки таш менән | Сентябрь |
| 3 | “Аҫыл таштар” (таштар менән уйындар) | Ҡырҡташ Ҡатырғыс | Апрель |
| 4 | “Тик тормаҫ тубым” (туп менән уйындар) | Бишташ Ыштандыр Ете быяла | Май |
| | | Һуҡма туп Урау туп | Июнь |
| | | Һыҙма туп Соҡор туп | Август |
| | | Өйрәк атыш Туҡта | Сентябрь |
| | | Ыштандыр | Октябрь |
| 5 | “Күңелле уйындар” (йыр менән уйналына торған уйындар) | Йәшерәм яулыҡ Аҡ тирәк- күк тирәк Наза | Март |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 6 | “Уйындар көнө” | Халыҡ уйындарын төркөмдәрҙә, ойоштороу эшмәкәрлектәрендә, режим ваҡыттарында, саф һауала ойоштороу, һүрәт – ситуациялар ҡарау | Май |
| 7 | “Уйындар һабантуйы” | Саф һауала квест уйындар ойоштороу | Июнь |

**Ата-әсәләр менән берлектә эшмәкәрлек**

| | Тема | Тормошҡа ашырыу юлы | Үтәү ваҡыты |
|---|---|---|---|
| 1 | “Онотола барған халыҡ уйындары” | Балалар менән берлектә уйындар уйнау | |
| | | Уйындар илендә | Сентябрь |
| | | Ғаиләм - ҡәлғәм | Октябрь |

**III этап. Йомғаҡлау этабы**

| | Тема | Тормошҡа ашырыу юлы | Үтәү ваҡыты |
|---|---|---|---|
| | “Халыҡ уйыны - хазина” | Оҫталыҡ класы | Ноябрь |

## 4. “БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ АШ – ҺЫУЫ”

**Инеш һүҙ:**

Борон - борондан башҡорт иле үҙенең төп законына - йолаға - нигеҙләнеп йәшәгән, үҫешкән. Оло хаҡы, кесе хаҡы, ҡатын хаҡы, ир хаҡы, бала йәки баба хаҡы, йәғни Кеше хаҡын фәҡәт йола ғына теүәл һаҡлаған. Олоно оло итеү, туған менән туған, кеше менән кеше араһындағы мөнәсәбәттәрҙең тейешле ыңғай барышы, йәғни гармонияһы, берҙән - бер хоҡуҡи сара - йолаға - буйһонған.

“Башҡорт халыҡ ижады” китабының 1 - се томында баш һүҙ мөхәрирриәттән бирелгән. Ошо китаптың инеш мәҡәләһе авторҙары Ә.Сөләймәнов менән Р.Солтангәрәева “йола” терминына шундай аңлатма биргәндәр: “Ғүмерҙең, йылдың һәр миҙгеле, айы, көнө һәр кемдән билдәле ҡағиҙәләрҙең үтәлеүен талап итә. Кешенең һәр бер аҙымы, хатта ниәт - маҡсаттары ла борондан ҡанундарға яраҡлаштырылған. Улар бөтә кешеләргә лә фарыз иҫәпләнгән, шул йола үтәү, йола”.

Боронғо йолаларға килгәндә, башҡорт халҡының һәр кәсебенә лә ҡағышлы төрлө кәңәштәр, тыйыуҙар ҙа булған.

Мәҫәлән, мал көткәндә:

- Һарайҙы таҙа тотһаң, сауабы ҙур була;
- Малды ҡарғама, һуҡма - ул да тере йән;
- Мал ҡыуған таяҡты ҡапҡа тышына һөйәһәң, мал үҙе ҡайта;
- Бәлә - ҡаза килер булһа, тауыҡ әтәс булып ҡысҡырыр, эт олор;
- Бесәй битен йыуһа, сәпсек тәҙрәнән ҡараһа, ҡунаҡ килеүгә һ.б.

### ❖ Башҡорт халҡының аш - һыуҙары

Милли аш-һыу башҡорттарҙа малсылыҡ хужалығы нигеҙендә барлыҡҡа килә. Халыҡтың йәшәү рәүеше

башҡорттарҙың үҙенсәлекле мәҙәниәтен, йолаларын һәм аш-һыуын формалаштырған: ауылдарҙа ҡышлау һәм йәйләүҙәрҙә күсмә тормош алып барыу рационды һәм аш-һыу әҙерләүҙе төрләләндереү мөмкинлеге биргән.

Күсмә тормош рәүеше оҙаҡ һаҡларға яраҡлы аҙыҡтарҙың киң рәтен формалаштырыуға килтергән. Башҡорт милли аштарының төп массаһын бешерелгән, киптерелгән һәм ҡаҡланған йылҡы ите, ҡуй ите, һөт продукттары, киптерелгән еләк, киптерелгән бөртөклөләр, башҡорт балы тәшкил иткән. Был ашамлыҡтарҙың миҫалы булып ҡаҙы-ҡарта ҡаҙы (йылҡы колбасаһы), баҫтырма (ҡаҡланған ит), шулай уҡ ҡаҡ, ҡымыҙ, сейәле һары май (вишня в топленом масле), муйыл майы, ҡорот (киптерелгән ҡорот), эремсек һәм айран тора - был ашамлыҡтарҙың бөтөнөһө лә йәйге эҫелә лә сағыштырмаса яҡшы һаҡлана һәм уларҙы юлға алыуы уңайлы. Ҡымыҙ тап юлда әҙерләнә тип иҫәпләнә - бейә һөтө һалынған һауыт эйәргә бәйләнгән һәм һабала көнө буйына сайҡалып йөрөтөлгән.

Традицион башҡорт ашамлығы бишбармаҡ бешерелгән иттән һәм һалманан (эре итеп киҫелгән туҡмастың төрө) әҙерләнә, мул итеп һуған, йәшел тәмләткестәр ҡушыла һәм әлбиттә, ҡорот өҫтәлә. Башҡорт аш - һыуының күҙгә ташланып торған тағы бер үҙенсәлеге: ашамлыҡтар янына йыш ҡына һөт продукттары бирелә - һирәк табын ҡоротһоҙ һәм ҡаймаҡһыҙ була. Башҡорт ашамлыҡтарының күпселеге әҙерләү ябайлығы һәм туҡлыҡлы булыуы менән айырылып тора.

Айран, буҙа, ҡаҙы, ҡатлама, ҡымыҙ, өйрә, ыумас ашы һәм башҡа бик күп ашамлыҡ төрҙәре Урал тауҙарынан Алыҫ Көнсығышҡа саҡлы биләмәләрҙә йәшәгән күп халыҡтарҙың милли ашамлығы тип һанала.

**Актуаллелеге:**

Халҡыбыҙҙа йәш быуынға иман, әҙәп, тәртип ҡанундарына бәйле саралар ойоштороуҙа, уларҙың рухын көсәйтеүҙә, халҡыбыҙ тарихын, көнкүрешен, йәшәү рәүешен үҙләштереүҙә даими эштәр башҡарыла. Әлбиттә, баланың рухи донъяһы формалашыуында быуаттар аша һаҡланып килгән йолалар, уйындар, байрамдар, халыҡ ижады сәнғәте ҙур роль уйнай.

Халҡыбыҙ хазинаһы менән баланы сәңгелдәктән үк тәрбиәләү мөһим. Беҙҙең тәрбиә эшенә килгәндә - был эшкә тағы ла бик ҙур урын бирелә.

Рәсәйҙә һуңғы йылдарҙағы үҙгәрештәр бөгөнгө көндә балалар баҡсаһы алдында айырыуса ҡатмарлы маҡсаттар ҡуя. Әлбиттә, хәҙерге заман ата - әсәләре үҙ ғаиләһендә башҡорт халҡының йәшәү шарттарын асыҡлап мәғлүмәт бирмәйҙәр тиерлек. Бала социумдың хоҡуҡлы ағзаһы булараҡ халыҡтың мәҙәни мираҫын үҙләштереп, һаҡлап, үҫтереп киләсәк быуынға тапшырырға тейеш. Шуға ла был эште кесе йәштәге балалар менән башлау отошло буласаҡ. Тыуған иле беҙгә бөтә яҡтан өлгөргән шәхесте үҫтереү, тыуған телен белеү, үҙ халҡының тарихын, ғөрөф - ғәҙәтен, мәҙәниәтен белгән шәхес тәрбиәләү беҙҙең педагогтарҙың тәрбиә эшенең маҡсаты булып тора.

**Проект төрө**: белем биреү.

**Үткәреү ваҡыты**: оҙайлы.

**Проекттың әһәмиәте:** башҡорт халҡының көнкүреше буйынса проектты тормошҡа ашырыу һәм тупланған тәжрибәне киң ҡулланыу.

**Проектта ҡатнашыусылар**: тәрбиәселәр, балалар, ата - әсәләр (законлы вәкилдәр).

**Маҡсат:**балаларҙы башҡорт халҡының боронғо көнкүреше, аш – һыуы менән таныштырыу.

***Балалар өсөн:***

**Бурыстар**:

- шарттар булдырыу;
- бәйләнешле телмәр үҫтереү, һүҙ байлығын арттырыу;
- башҡорт халҡының көнкүрешенә, кәсебенә һәм ғөрөф - ғәҙәтенә ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм уларға ҡарата ихтирам тәрбиәләү;

***Ата-әсәләр өсөн:***

- проект буйынса саралар планын төҙөү, ошо проблема буйынса үҫтереүсе предметлы мөхитте байытыу, күргәҙмә материал тупларға йәлеп итеү;
- ҡыҙыҡһыныу уятыу;

**Көтөлгән һөҙөмтә:**

тема буйынса үҫтереүсе предметлы мөхитте байытыу, тулыландырыу;

**Проектты тормошҡа ашырыу планы:**

**I этап.Әҙерлек этабы:**

- мәғлүмәттәр эҙләү, өйрәнеү, тикшеренеү;
- проблеманы анализлау, маҡсат һәм бурыстар ҡуйыу;
- методик әҙәбиәт туплау;
- проектты тормошҡа ашырыу планын төҙөү.

**II этап. Практик өлөш:**

***Балалар менән эшмәкәрлек:***

- ҡуйылған маҡсат һәм бурыстарҙы тормошҡа ашырыу;
- әңгәмәләр үткәреү;
- консультациялар: “Боронғо башҡорт торлағы”, “Халҡымдың биҙәктәре”, “Аш - һыу төрҙәре” һ.б.;
- папка - йәймәләр, альбомдар: “Халыҡ кейеме”, “Башҡорт аты”, “Аш - һыу төрҙәре” һ.б.;
- балалар ижадынан күргәҙмә ойоштороу: “Балаҫ”, “Бейәләйҙәр”, “Башҡорт һауыты” һ.б.;
- дидактик уйындар уйнау: “Башҡорт балаҫы”, “Һауыттарҙың өлөшөн тап”, “Тирмәне биҙә” һ.б.;
- сюжетлы - ролле уйындар уйнау;

***Ата-әсәләр менән эшмәкәрлек:***

- малсылыҡ тураһында фотостенд әҙерләү;
- консультациялар, нәфис әҙәбиәт туплау;
- папка - йәймә, кейемдәр һауыт – һаба һ.б. эш төрҙәрен берлектә үтәү;

**III этап. Йомғаҡлау:**

- материалдарҙы туплау һәм эшкәртеү;
- маҡсат итеп ҡуйылған һөҙөмтәләр менән килеп сыҡҡан һөҙөмтәләрҙе сағыштырыу;
- проектты яҡлау һәм презентациялау.

**Проекты тормошҡа ашырыу планы:**

| **Үҫеш өлкәләре** | **Эшмәкәрлек төрҙәре** | **Йөкмәткеһе** |
|---|---|---|
| Телмәр үҫеше | Нәфис әҙәбиәт | З.Ҡотлогилдина“Кымы |

| | | |
|---|---|---|
| | Йомаҡтар, мәҡәлдәр – халыҡ ижады | ҙ бешә әсәйем” Р.Ниғмәтуллина“Бал ҡорто” М.Хисмәтуллина“Бүлм әгеҙ эште” - А.Йәғәфәрова“Минең атым”, “Ала һыйыр”, “Бәләкәстәр”; С.Муллабаев: “Аҡ бәрәс” “Эш табылды”хикәйәһе, “Тирмәкәй”, “Эт нисек үҙенә хужа тапҡан?” – экиәттәре; Р.Ураҡсина “Ҡорот”, “Ҡаймаҡ”,“Ҡатыҡ” һ.б. |
| Художестволы эстетик үҫеш | Һүрәтләү<br><br>Йәбештереү<br><br>Әүәләү<br>Конструкторлау | “Башҡорт аттары ” “Сағыу башҡорт биҙәктәре” “Башҡорт халыҡ һауыт – һабалары” һ.б. “Әсәйемә бауырһаҡ” “Минең йортом”, “Хайуандарға һарай” һ.б. |
| Социаль-коммуникатив үҫеш | Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре<br>Сюжетлы – ролле уйындар<br><br>Дидактик уйындар | “Ни өсөн кешегә өй кәрәк?”<br><br>“Ғаилә”, “Магазин”, ”Әртистәр”, “Минең атым” һ.б. “Малсылыҡта – һыйыр малы” “Ниндәй өйҙәр була?”,“Нимә артыҡ?”. |

| | | |
|---|---|---|
| | Уйын ситуациялар<br><br>Ситуатив әңгәмәләр | “Башҡорт балаçы”, “Парын тап”, “Башҡорт тирмәһен төҙө”, “Дөрөç төркөмлә” һ.б.<br>“Әсәһен тап”<br>“Нимә ул умарта?”, “Балдың кеше өсөн файҙаһы”, “Бал ҡортона ярҙам ит” |
| Танып - белеү үçеше | Эҙләнеү - тикшеренеү эшмәкәрлеге<br><br>Әңгәмәләр<br><br>Виртуальэкскурсия | “Һөт аҙыҡтары”,“Ҡымыҙ”,“Һарыҡ көтөүҙең файҙаһы”<br>“Йорт хайуандары һәм уларҙың балалары”, “Өйҙәр төрлө, төрлө була” һ.б.<br>“Крайҙы өйрәнеү музейы” |
| Физик үçеш | Квест уйындар<br><br>Бармаҡ уйындары | “Аттар сабышы”, “Сүрәкә”, “Бура уйыны”, “Тура юлдан бар”һ.б.<br>Р.Раҡаева шиғырҙары З.Йәнбирҙина “Ҡолонсаҡ” |

## 5. “БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ШӨҒӨЛӨ – СОЛОҠСОЛОҠ”

**Инеш һүҙ:**

Бал ҡорттары тәүтормош кешеләре барлыҡҡа килгәнгә тиклем, йәшәгән. Бал ҡорто - осоусы ҡорт, күмәкләп тереклек итеүсе, ҡаяулы, ярыҡканатлы бөжәктәр вәкиле.

Солоҡ - ҡырағай бал ҡорттары өсөн үҫеп ултырған ағасты соҡоп яһаған умарта. Башҡортостан - солоҡсолоҡ һаҡланып ҡалған, солоҡ балы (ҡырағай урман балы) таба торған Ер шарында берҙән-бер урын. Солоҡсолоҡ, кәсеп булараҡ, боронғо Башҡортостан территорияһында бик күптән булған. Солоҡсолоҡ ике формала була. Беренсеһе - ағастарҙың олонондағы өңдө ҙур итеп соҡоп эшләнә, бал йыйыр өсөн ҡоролма ҡуйыла. Икенсеһен кешеләр үҙҙәре эшләй. Улар йәшәгән ерҙәренә солоҡто яҡыныраҡ урынлаштыра. Ул 60 см ҡалынлығында, 6-8 метр бейеклегендәге тура ағас. Унда ла ағас олонон соҡоп эшләйҙәр. Артабан ағас ҡыуыштарында - солоҡтарҙа оялаған ҡорттарҙы ҡарағандар һәм тәрбиәләгәндәр. Солоҡ айыуҙарҙан да һаҡлана, кешегә лә яҡын була. Элек йыйылған бал яһаҡ түләүгә тотонолған, ауырыған кешеләргә дарыу итеп тә бирелгән.

Әлбиттә, сәскә атыусы үҫемлектәр бал ҡорттары өсөн йәшәү сығанағы. Эшһөйәр ҡорттар сәскәнән - сәскәгә ҡунып, татлы бал йыя. Төрлө еҫ сығарыусы, төрлө төҫ алған сәскәләрҙе ҡорттар еңел айыра. Ер йөҙөндә меңдән ашыу баллы үҫемлек төрө бар, әммә бал ҡорттары уларҙың ҡырҡ - иллеһенән генә тат йыя; баллы үҫемлектәргә ҡарабойҙай, көнбағыш, люцерна, туҡранбаш, рапс, ҡандала үләне, аҡ акация, ҡурай еләге, ҡара көртмәле, эт муйылы, йүкә һ.б. инә. Төрлө үҫемлектәрҙең балы ла төрлө төҫтә була: мәҫәлән, ҡара бойҙай балы ҡыҙғылтыраҡ төҫтә була, көнбағыш балы - һары, ә йүкә балы бөтә балдан да үҙенең хуш еҫе, аҡһыл төҫтә булыуы менән айырылып тора. Йүкә балы шулай уҡ иң ҡиммәтле бал булып та иҫәпләнә. Йүкә сәскә атҡан ваҡытта урманда булғанығыҙ барҙыр? Урманға инеү менән танауға хуш бал еҫе килеп бөркөлә. Ысынлап та, бал

косметика, кулинария һәм медицинала киң ҡулланыла, балдың кеше организмына файҙаһы бик ҙур.

**Актуаллелеге:**

Башҡорт балы. Был исем бар донъяға таныш. Нимә ул солоҡсолоҡ? Кемдәр уның менән шөғөлләнгән? Балдың файҙаһы, уның ни өсөн кәрәклеген, шулай уҡ башҡорт халҡының боронғо кәсебе тураһында балаларға һис шикһеҙ еткереү мөһим, был проект эше бының өсөн бик урынлы.

**Проекттың төрө:** танып-белеү.

**Үткәреү ваҡыты:** оҙайлы.

**Проекттың әһәмиәте:**

- балаларҙы башҡорт халҡының боронғо кәсебе “Солоҡсолоҡ” менән таныштырыу, башҡорт балына ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

**Проектта ҡатнашыусылар:** балалар, ата - әсәләр, тәрбиәселәр.

**Маҡсат:**балдың үҙенсәлеге, файҙаһы тураһында балаларҙың белемен камиллаштырыу.

**Бурыстар:**

***Балалар өсөн:***

**Белем биреү:**

- төрлө ябай күҙәтеүҙәр аша балаларҙың бал тураһында күҙҙаллауын үҫтереүгә булышлыҡ итеү;

**Үҫтереүсе:**

- һүҙлек запасын байытыу;
- бәйләнешле телмәр, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү;
- бал, бал ҡорто, ҡортсолоҡ тураһында балаларҙың белемен үҫтереү;

**Тәрбиәүи:**

-балға, бал ҡорттарына, тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү;

***Ата - әсәләр өсөн:***

- ата - әсәләргә проект буйынса белешмә биреү;
- проект буйынса саралар планын төҙөү;
- күргәҙмә материал туплау;
- башҡорт балы тураһында белемен арттырыу;

- проект эшен тормошҡа ашырыуҙа әүҙем хеҙмәттәшлек итеү;
- үҫтереүсе предметлы мөхитте байытыу;

**Көтөлгән һөҙөмтә:**

Проект эшенең һөҙөмтәһе итеп төркөмдә солоҡсолоҡ буйынса үҙәк булдырыу, шулай уҡ бал тураһында шиғырҙар, әкиәттәр, йомаҡтар, папкалар, альбомдар эшләү.

**Проектты тормошҡа ашырыу планы:**

**I этап.** *Әҙерлек этабы.*

- маҡсат, бурыстар ҡуйыу;
- бал тураһында мәғлүмәт йыйыу;
-ҡулланылған материалдар, эш ҡоралдары әҙерләү, төркөмдә солоҡсолоҡ тураһында үҫеш мөхите урынын булдырыу;
- проект буйынса эш формаларын, балалар менән эш алымдарын, ата - әсәләр менән бәйләнеш юлдарын билдәләү;

***Балалар менән:***

- нәфис әҙәбиәт менән таныштырыу;
- бал тураһында шиғырҙар уҡыу;
- мәҡәлдәр, әйтемдәр һәм йомаҡтар сисеү;
- һүрәттәр ҡарау;
- балдың әһәмиәте тураһында әңгәмәләр үткәреү;
-бал ҡорто тураһында видеояҙмалар ҡарау;

***Ата - әсәләр менән:***

-“Ҡортсолоҡ” темаһына ҡул эштәре конкурсы;
- “Бал. Уның кеше тормошондағы роле”, “Нисек бал ҡортонан һаҡланырға?” – консультациялар әҙерләү;
-“Бал һәм уның әһәмиәте” - папка - йәймә;

**II этап.**

**Проекттың төп өлөшө.**

**Балалар менән эшмәкәрлек:**

| **№** | **Тема** | **Тормошҡа ашырыу юлдары** |
|---|---|---|
| **Социаль – коммуникатив үҫеш** | | |
| 1 | “Солоҡсолоҡ”, “Магазин” һ.б. | Сюжетлы – ролле уйындар |

| | | |
|---|---|---|
| 2 | ‘Башҡорт халҡының шөғөлө”<br>‘Был эш ҡоралы кемгә кәрәк”<br>‘Ҡырҡылған һүрәтте йый”һ.б. | Дидактик уйындар<br>Электрон китапсыҡ |
| 3 | ‘Әгәр ҙә бал ҡорто саҡһа?” һ.б. | Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре<br>Уйын – викторина |
| **Телмәр үҫеше** | | |
| 1 | “Бал ҡоттарының файҙаһы”<br>“Балдың файҙаһы” һ.б. | Бәйләнешле телмәр |
| 2 | ‘Айыу һәм бал ҡорттары”<br>‘Айыу ниңә ҡойроҡһоҙ?” һ.б. | Башҡорт халыҡ әкиәттәре |
| 3 | ‘Эшһөйәр бал ҡорттары” | Хикәйә |
| 4 | Әйтемдәр, йомаҡтар, мәкәлдәр, һынамыштар | Халыҡ ижады |
| 5 | ‘Бал ҡорттары”<br>’Бал”<br>‘Турғай һәм бал” һ.б. | Шиғырҙар |
| **Танып белеү үҫеше** | | |
| 1 | Солоҡсолоҡ менән кемдәр шөғөлләнгән? | Виртуальэкскурсия |
| 2 | Бал ҡорттары”, “Бал батманы”һ.б. | Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге, дискуссия |
| 3 | Солоҡсолоҡ | Видеояҙма, иллюстрациялар сюжетлы һүрәттәр ҡарау |
| 4 | Бал ҡортоноң төҙөлөшө һ.б. | Күҙәтеүҙәр<br>Эҙләнеү – тикшеренеү эшмәкәрлеге |
| **Художестволы – эстетик үҫеш** | | |
| 1 | ”Солоҡсолоҡ”, “Башҡорт балы” | Һүрәт төшөрөү |

| | | |
|---|---|---|
| 2 | “Айыу бал мисҡәһе менән” “Кәрәҙ эшләйбеҙ” | Әүәләү,ситуацион уйын |
| 3 | “Умарталыкта”, “Солоҡсолоҡ” һ.б. | Конструкторлау эшмәкәрлеге |
| 4 | “Айыу һәм бал ҡорттары” | Театр эшмәкәрлеге |
| 5 | “Нәҙекәйбил” һ.б. | Музыкаль эшмәкәрлек |
| **Физик үҫеш** | | |
| 1 | “Айыу һәм бал ҡорттары” “Ҡырағай һәм умарта ҡорттары” | Хәрәкәтле уйындар |
| 2 | “Бал ҡорттары” | Ял минуттары |
| 3 | “Бал ҡорттары” һ.б. | Бармаҡ уйындары |
| 4 | “Бал- матурлыҡ һәм сәләмәтлек сығанағы” “Балдың һаулыҡҡа йоғонтоһо” “Балдың әһәмиәте” | Һау - сәләмәт йәшәү рәүеше |

**Ата – әсәләр менән эшмәкәрлек:**

| | | |
|---|---|---|
| 1 | “Кортсолоҡ” | Кул эштәре конкурсы |
| 2 | “Бал һәм унын әһәмиәте | Мәғлүмәт стенды, папка – йәймә Буклеттар Акция |
| 3 | “Бал. Унын кеше тормошондағы роле” “Нисек бал ҡортонан һаҡланырға!” | Консультациялар Дискуссия |

**III этап. Йомғаклау.**

Балалар һәм ата - әсәләр менән берлектә төркөмдә “Солоҡсолоҡ” тип аталған үҙәк булдырыу.

## 6. “БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ШӨҒӨЛӨ – ЙЫЛҠЫСЫЛЫҠ”

### Инеш һүҙ:

Йылҡысылыҡ - борондан ҡалған, матди мәҙәниәтебеҙҙең ҙур өлөшөн тәшкил иткән тармаҡ. Башҡорттар биләгән ер үҙе үк йылҡысылыҡ өсөн уңайлы булған. Сәскәле болондар, ҡылғанлы далалар, ҡарҙан иң тәү әрселә торған түмәләсле яландар, ҡыш көндәре ышыҡланыу өсөн ҡалын урмандар йылҡысылыҡты үҫтереү өсөн бигерәк тә ыңғай шарттар тыуҙырған. Шуғалыр ҙа башҡорттар борон-борондан йылҡысылыҡ менән шөғөлләнгән. Атһыҙ башҡорт булмаған. Ҡайһы бер сығанаҡтарға ҡарағанда, 20-се быуатҡа хәтле башҡорттар йылҡыһыҙ йәшәмәгәндәр. Иң ярлы һаналған башҡорттоң да 15-ләп аты булған.

Башҡорт тормошон өйрәнеүсе И.Г.Георгиҙың яҙмаларында күрһәтелгәнсә, иң ябай башҡорттоң да 30-50 аты булған, күптәренең 500 башҡа еткән, байҙарҙың 1000, ҡайһыларының 2000 һәм унан да күберәк булған. Башҡорт халҡының тарихы, ғөмүмән, йәшәйеше ат менән айырылғыһыҙ бәйләнгән. Ат кешене борон-борондан туйындырған, кейендергән, яуҙарҙа һаҡлаған. Ә инде бөгөнгө көндә йылҡысылыҡты үҫтереүгә ихтыяж бермә-бер үҫә. Әлеге ваҡытта Башҡортостан аттар һаны буйынса Рәсәйҙең башҡа төбәктәре араһында беренсе урынды алып тора. Тоҡомло аттар үрсетеү, йылҡы ите, ҡымыҙ етештереү агросәнәғәт комплексының өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһенә әүерелде.

Башҡорттарҙа башлыса ат өс йүнәлештә аҫыралған.

Иң беренсе *ау өсөн*. Улар айырым тотолған, өйөрҙәге иң етеҙ, йылдам аттар һайлап алынып, махсус рәүештә тәрбиәләнгән.

Икенсе йүнәлеш: *эш аттары*.

Өсөнсө йүнәлеш: *ит һәм һөт өсөн*. Бейә һөтөнән шифалы эсемлек-ҡымыҙ яһалған. Итенән ҡаҙы әҙерләнгән.

***Башҡорт ҡымыҙы***

Башҡорттарҙа ҡымыҙ бешеү серҙәре ныҡлы һаҡланып, быуындан быуынға тапшырыла килә. Башҡорт тоҡомло бейәләр һөтөнән эшләнгән ҡымыҙ айырыуса сихәтле сифаттарға эйә. Үҙенең иҫтәлектәрендә яҙыусы, яҡташыбыҙ Сергей Аксаков былай тип яҙа: “Яҙ етеп ер асылғас, туғай-болондар хуш еҫле йәшеллек менән ҡапланғас та ҡышҡыһын ябыҡҡан аттар тиҙ генә көрәйеп ала һәм башҡорттар ҡымыҙ әҙерләү эшенә тотона. Бер аҙҙан йәш балаларҙан алып ҡарыуы ҡайтҡан ҡарттарға тиклем был шифалы эсемлекте эсә башлай. Аҙ ғына ваҡыт эсендә оҙон һалҡын ҡышты аслы-туҡлы үткәреүҙән барлыҡҡа килгән ауырыуҙары һыпырып алғандай юҡҡа сыға. Кешеләрҙең ябығыуҙан һурыҡҡан йөҙҙәре тулыланып, йәшәреп китә. Хатта сабыйҙарҙың, йәштәрҙең генә түгел, ҡарттарҙың бит остарына алһыу төҫ ҡуна”.

**Актуаллелеге:**

Хәҙерге заманда магазиндарҙа ниндәй генә аҙыҡ юҡ, йәнең теләгәнен алып аша. Әммә нисек итеп дөрөҫ туҡланыу бик актуаль мәсьәлә. Йылҡы ите- башҡорттарҙың иң яраткан ризығы. Йылҡы ите – дауа, унаң сәләмәтлеккә шифаһы ҙур. Бейә һөтөнән эшләнгән ҡымыҙ айырыуса сихәтле сифатҡа эйә икәнлеген ата - әсәләр, балалар белергә тейеш. Ул ғына ла түгел, аттар дарыуҙар яһауҙа туранан-тура ҡатнаша. Бактериология институттарында донор аттарҙың ҡанынан гангрена - тәндең үлекләүе, столбняк - һеңерҙәр тартышыу, дифтерия - балаларҙың тамаҡ сире, ботулизм - аҙыҡтан ағыуланыу кеүек ҡурҡыныс сирҙәргә ҡаршы дарыуҙар эшләнә.

**Проект төрө**: танып белеү.

**Үткәреү ваҡыты:** оҙайлы.

**Проектта ҡатнашыусылар:** балалар, ата-әсәләр (законлы вәкилдәр), тәрбиәселәр.

**Проект маҡсаты:** башҡорт халҡының шөғөлө – йылҡысылыҡ буйынса материалдар туплау һәм өйрәнеү.

**Бурыстары:**

- балаларҙың башҡорт халҡының шөғөлө - йылҡысылыҡ буйынса белемен киңәйтеү;
- һау - сәләмәт йәшәү рәүеше формалаштырыу;

- халыҡ йолалары, аш - һыу менән таныштырыу;
- һүҙлек байлығын арттырыу, телмәр, аң-зиһен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү;
- йылҡы малына ҡарата һаҡсыл ҡараш, иғтибар һәм һөйөү тәрбиәләү;

**Көтөлгән һөҙөмтә:** өйрәнелгән һәм тупланған материалдарҙан, ата - әсәләр менән берлектә, үҫтереүсе предметлы мөхит булдырыу, "Ҡымыҙ байрамы" үткәреү.

**Ойоштороу этабы:**

**I этап:** Әҙерлек этабы.

- Тема һайлау, маҡсат һәм бурыстар ҡуйыу;
- Йылҡысылыҡ тураһында материалдар туплау;
- Ата - әсәләрҙе йәлеп итеү, йыйылыш үткәреү;
- Әңгәмә ойоштороу;
- Сюжетлы - ролле, дидактик, хәрәкәтле һ.б. уйындар уйнау;
- Ата-әсәләр өсөн консультациялар әҙерләү;
- Төркөм бүлмәһендә шарттар булдырыу;

**II этап:** Төп этап.

**Проектты тормошҡа ашырыу юлы**
**өйрәнеү өсөн темалар:**

1. Йылҡы донъя халыҡтары тарихында
2. Төҫтәре буйынса бүленеш
3. Йәштәре буйынса бүленеш
4. Ҡайһы бер атамалар
5. Һаны

*Йылҡы – башҡорт мәҙәниәтендә*

- Яу толпарҙары
- Башҡорт ҡымыҙы
- Ат тиреһенән эшләнгән һауыт-һабалар
- Йылҡы ите-дауа
- Башҡорт халҡында йылҡы образы

*Халыҡ ижады*

- Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә
- Мәҡәлдәр
- Эпостарҙан өлгөләр

6. Ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр

**Балалар менән эшмәкәрлек:**

| № | Тема | Тормошҡа ашырыу юлдары |
|---|---|---|
| **Социаль – коммуникатив үҫеш** | | |
| 1 | “Минең ғаиләм”<br>“Ат ҡураһында” һ.б. | Сюжетлы – ролле уйындар |
| 2 | “Ҡура боҙолдо”<br>“Аттар донъяһында” һ.б. | Уйын – ситуациялар |
| 3 | “Ниմәнең тауышы?”<br>“Һәр аттың өйөн тап”<br>“Парын тап”<br>“Нимә артыҡ?” (ат дағаһы төҫтәр менән)<br>“Ат ҡайҙа йәшенгән?”,“Ҡырҡылған һүрәттәр”, “Айырмаһын әйт”, “Ат ниндәй төҫтә?” һ.б. | Дидактик уйындар<br><br>Ситуациялы әңгәмә |
| 4 | “Атҡа яҡын барма”<br><br>“Ат һарайын йыйыштырыу” һ.б. | Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре<br><br>Ситуациялы һорауҙар |
| **Телмәр үҫеше** | | |
| 1 | “Аттар”<br>М.Клокова “Минең атым”<br>А.Боарьо “Минең атым” | Ижади һөйләү<br><br>Видеояҙма, картина, иллюстрациялар, виртуальэкскурсия |
| 2 | Рус халыҡ әкиәте “Күгат” һ.б. | Әкиәттәр |

| | | |
|---|---|---|
| 3 | “Йылкысыҡҡан күле” | Башҡорт халыҡ легендаһы |
| 4 | Әйтемдәр, йомаҡтар, мәҡәлдәр, һынамыштар | Халыҡ ижады |
| 5 | А.Йәғәфәрова “Минең атым”<br>С.Ағиш “Турыҡай”<br>Г.Ғәлиева “Ҡымыҙ"<br>Ф.Туғыҙбаева “Аттар-ҡунаҡтар”<br>А. Игебаев “Аҡбуҙат” һ.б. | Шиғырҙар уҡыу, ятлау |
| **Танып - белеү үҫеше** | | |
| 1 | “Аттар” | Тирә-йүн менән таныштырыу. Дискуссия |
| 2 | Геральдика<br>Дидактик уйын “Нисә ат?”<br>Төҫтәре буйынса бүленеш<br>Йәштәре буйынса бүленеш | Башланғыс ябай математик төшөнсәләр биреү |
| 3 | Йылҡы – башҡорт мәҙәниәтендә | Виртуальэкскурсия<br>Видеояҙма<br>иллюстрациялар<br>сюжетлы һүрәттәр |
| **Художестволы – эстетик үҫеш** | | |
| 1 | “Минең атым”<br>“Ат тирәһенән эшләнгән һауыт –һабалар” һ.б. | Һүрәт төшөрөү |
| 2 | “Ат дағаһы” һ.б. | Мастер класс |
| 3 | “Ат һарайы”<br>“Йорт хайуандары өсөн ҡура” һ.б. | Уйын ситуациялар<br>Ҡоролмалар ҡороу |
| 4 | “Толпар Аҡбуҙат ” һ.б. | Музыкаль эшмәкәрлек |
| **Физик үҫеш** | | |

| | | |
|---|---|---|
| 1 | “Аттар”, “Ат сабышы” һ.б. | Квест уйын<br>Хәрәкәтле уйындар |
| 2 | “Аттың ялына һәм ҡойроғона өрөү” | Тын алыу гимнастикаһы |
| 3 | Аттар сабышы | Бармаҡ уйыны |
| 4 | “Ҡымыҙҙың файҙаһы” , “Ҡаҙылыҡ” | Һау - сәләмәт йәшәү рәүеше |
| 5 | “Атта сабыу” | Артикуляция гимнастикаһы |

**Ата – әсәләр менән эшмәкәрлек:**

| № | Тема | Тормошҡа ашырыу юлы |
|---|---|---|
| 1. | “Кеше юлдашы - ат” | Ата-әсәләр йыйылышы |
| 2. | Ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр туплау | Папка - йәймә, фотоһүрәттәр менән альбом |
| 3. | “Башҡорт ҡымыҙы” | Консультация |
| 4. | “Башҡорт халҡының шөғөлө - йылҡысылыҡ” | Үҫтереүсе мөхит булдырыу, уйындар әҙерләү |
| 5. | Ҡымыҙ байрамы | Ҡымыҙ байрамын әҙерләү |

**III этап:** Йомғаҡлау этабы.
Ата-әсәләр менән берлектә үҫтереүсе предметлы үҫеш мөхитен булдырыу, альбомдар эшләү.
“Ҡымыҙ” байрамы үткәреү.

## 7. “БАШҠОРТ ХАЛЫҠ МИЛЛИ КЕЙЕМДӘРЕ”

**Инеш һүҙ:**

“Ағас күрке - япраҡ, әҙәм күрке - сепрәк” тигән әйтем башҡорттарҙа бар.

Әҙәм тәнендә барлыҡҡа килгән замандарҙан алып, кейем кешене һыуыҡ, эҫе, ел - ямғыр кеүек тәбиғәт стихияһынан һаҡлаусы ғына түгел, уның мәҙәни - социаль статусын, этник сығышын билдәләүсе лә, шул уҡ ваҡытта кешенең эске донъяһы - рухиәтен, эстетик - мәҙәни ҡараштарын, аң - белем һәм художестволы зауыҡ кимәлен күрһәтеп тороусы билдә лә ул. Башҡорттарҙың бөгөнгө көнгәсә килеп еткән боронғо милли кейеме башҡа бер халыҡта ла булмағанса үҙенсәлеге менән айырылып тора. Традицион башҡорт костюмдарында бер ваҡытта ла арзан яһалма биҙәүестәр, быяла мунсаҡтар булмаған. Алтынға ла ҡыҙыҡмаған башҡорт - көмөштө үҙ иткән.

Традицион кейем - һалым - кешенең милли йөҙөн билдәләүсе күрһәткес. Кейем - һалымдың составы, уның төрҙәре, биҙәү һыҙаттары күп быуаттар буйы формалашҡан. Ул халыҡтың хужалыҡ - көнкүреш торошона, уның мәҙәни - тарихи үҫешенә бәйле. Башҡорттоң милли кейеме уны “уҡый” белгәндәр өсөн үҙе бер бай тарихлы китап кеүек ул. Уның ысын өлгөләрен хәҙерге быуындарға фәҡәт музейҙарға барып ҡына тамаша ҡылырға тура килә. Башҡорттарҙың милли кейеме халыҡтың философик - этик ҡараштарына, тормош шарттарына, меңәр йыллыҡ тарихына, ырым - йола, традицияларына ныҡ бәйле.

Башҡорт милли кейеме - башҡорт халҡының баш, өҫ һәм аяҡ кейеме. Милли кейем - халыҡтың эске булмышының сағылышы. Кеше үҙенең күңел донъяһын кейеме аша асып бирергә ынтылһа, милләттең дә йәшәү рәүеше, көнкүреше, эске донъяһы - тышҡы ҡиәфәтендә сағыла. Шуға ла боронғо замандарҙан алып кешегә бер ҡараш ташлау менән, уның ниндәй милләттән икәнен билдәләп булған. Башҡорттоң иһә күңел

байлығы сигеү - нағыштa, мәрйендән селтәрләп яһалған биҙәүестәрҙә, көмөшкә сүкеп һалынған биҙәктәрҙә сағылған.

**Актуаллелеге:**

Ғөмүмән, башҡорт милли кейемдәре хаҡында бик оҙаҡ һөйләргә булыр ине, сөнки хәҙер кеше сәхнәләрҙә сығыш яһау өсөн стилләштереп тегелгән концерт костюмдарынан тыш элекке ысын башҡорт милли кейеме тураһында онотоп та бара. Айырыуса йәштәр,балалар был хаҡта бер ни ҙә белмәй. Балаларҙың башҡорт халыҡ милли кейемдәрен тик сәхнәләрҙә, һүрәттәрҙә генә күреүе, кейемгә ҡарата атай - әсәйҙәрҙең ҡараштарының юғалып барыу проблемаһы проектты тормошҡа ашырыуға этәрә.

**Проекттың төрө**: ижади, мәғлүмәти.

**Үткәреү ваҡыты**: оҙайлы.

**Проектта ҡатнашыусылар**: тәрбиәләнеүселәр, ата - әсәләр (законлы вәкилдәр), тәрбиәселәр.

**Маҡсат:** башҡорт халҡының милли кейемдәре менән таныштырыу, милли кейемдәрҙә ҡурсаҡтар әҙерләү, ата - әсәләр менән әүҙем хеҙмәттәшлек итеү.

**Бурыстар:**

- балаларҙы башҡорт милли кейемдәре, уларҙың төрҙәре менән таныштырыу;
- балаларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереү, һүҙлек запасын байытыу;
- проектты тормошҡа ашырыуҙа ата – әсәләрҙе йәлеп итеү;
-халыҡ мәҙәниәтенә ҡарата һөйөү тәрбиәләү;

**Көтөлгән һөҙөмтә:**

- милли кейемдәрҙә ҡурсаҡтар әҙерләү һәм күргәҙмә ойоштороу;
- милли кейемдәрҙә дефиле ойоштороу;

**Эш формалары һәм алымдары:**

Тематик музыка ойоштороу эшмәкәрлектәре, презентация, әңгәмә,дискуссия, маҡсатлы сәйәхәттәр,виртуальэкскурсиялар, йәнһүрәттәр ҡарау, ситуациялар сисеү, шиғырҙар ятлау, өҫтәл уйындары, квест уйындар,күҙәтеүҙәр, әҙәби әҫәрҙәр уҡыу, сюжетлы - ролле, дидактик уйындар, иллюстрациялар ҡарау.

**Эшләү өсөн нигеҙ:**

- проект ҡыҫҡа ваҡыт эсендә конкрет һөҙөмтәләргә ирешеү мөмкинселеге бирә;

- проектты тормошҡа ашырыуҙа балалар, ата - әсәләр һәм педагогтарҙың әүҙем ҡатнашыуын тәьмин итә;

**Әҙерлек этабы:**

-ойоштороу эшмәкәрлеге темаһы буйынса иллюстрациялар, картиналар, слайд, аудио, видеояҙмалар туплау;

- проект темаһы буйынса балалар әҙәбиәте һайлау;

- башҡорт халыҡ милли кейемдәре өлгөләре һайлап алыу;

**Проекттың йөкмәткеһе:**

- башҡорт мәҙәниәтен, милли кейемдәрен өйрәнеү буйынса ойоштороу эшмәкәрлектәре, виртуальэкскурсиялар үткәреү;

- балаларҙың ижади эшмәкәрлеген ойоштороу: һүрәт төшөрөү,ҡорамалар йәбештереү һ.б.;

- ата - әсәләр менән коллектив эш: "Минең милли ҡурсағым";

- "Милли кейемдәр"альбомы эшләү өсөн материал йыйыу;

**Проектты тормошка ашырыу:**

1.*Тирә – йүн менән таныштырыу* тематик ойоштороу эшмәкәрлеге циклы менән таныштырыу:

-"Башҡорт халыҡ милли кейемдәре" - презентация ҡулланып ойоштороу эшмәкәрлеге үткәреү;

-"Ҡатын - ҡыҙҙар кейеме" - презентация, слайдтар ҡарау, ҡыҫҡаса тарихы менән танышыу, виртуаль экскурсия;

-"Балалар сәнғәт мәктәбе", "Балалар ижад үҙәге" - маҡсатлы сәйәхәт, башҡорт халыҡ милли кейемдәренең килеп сығыуы тураһында ҡыҫҡаса тарихы менән танышыу;

*2.Һүрәтләү эшмәкәрлеге:*

-"Минең матур ҡурсағым" һ.б. – һүрәт төшөрөү, буяу;

-"Ситектәр" - ташландыҡ һәм тәбиғәт материалдарынан ҡорама йәбештереү - коллектив эш;

-"Башҡорт күлдәге" һ.б. - фотоколлаж;

*3.Уйын эшмәкәрлеге*

Түңәрәк уйындар:“Тирмә”, “Ҡурай”, “Әйләнәбеҙ - әйләнәбеҙ” һ.б.

4.*Нәфис әҙәбиәт уҡыу:*

-“Башҡорт халҡының милли кейемдәре”;

- башҡорт халыҡ милли кейемдәре тураһында шиғырҙар, мәҡәлдәр, йомаҡтар өйрәнеү;

*Проектты тормошҡа ашырыуҙа ата - әсәләрҙең роле:*

- альбомдарҙы биҙәү өсөн материал;
- ҡурсаҡтарға милли кейемдәр әҙерләү, тегеү;
- балаларға милли кейемдәр тегеү;
- ҡурсаҡтар менән берлектә фото - һүрәттәр күргәҙмәһен ойоштороу;

**Проектты йомғаклау:**

-“Минең милли ҡурсағым” күргәҙмә;

-“Башҡорт халыҡ милли кейемдәре” папка - йәймәләр һәм альбомдар;

- Фото - күргәҙмә;
- Дефиле “Башҡорт милли кейемдәре”;

-“Сәсмәүерем - селтәрем” фестиваль – конкурс.

## 8. “БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ШӨҒӨЛӨ - БАЛЫҠСЫЛЫҠ”

Балыҡсылыҡ башҡорттарҙың иң боронғо кәсептәренең береһе булып һанала. Был кәсеп борондан беҙҙең көнгәсә быуындан – быуынға күсеп килгән. Уларҙың нигеҙҙәре тәүтормош заманына барып тоташа. Башҡортостан тәбиғәте балыҡсылыҡ өсөн ифрат уңайлы. Сөнки Республикабыҙ йылға, күл һәм быуаларға бик бай. Һыу ятҡылыҡтарҙың майҙаны ғына 130 мең гектар самаһы. Ә инде йылға-күлдәребеҙҙә 40-тан ашыу балыҡ төрө бар.

Балыҡ тотоу әллә ни ауыр һөнәр ҙә түгел, ҙур сығымдар һәм көс тә талап итмәй. Әммә ул бик табышлы. Балыҡ ите туҡлыҡлы ла һәм файҙалы ла. Шулай уҡ балыҡта кеше организмына кәрәк булған фосфор ҙа бар. Бәлки шуғалыр ҙа ата-бабаларыбыҙҙың төп кәсептәренең береһенә әүерелгән.

Кешеләр балыҡтарҙы элек - электән ҡаҡлағандар, киптергәндәр, бешергәндәр, ыҫлағандар һәм ҡыҙҙырғандар. Ә шулай ҙа иң таралғаны булып балыҡ һурпаһы торған һәм хәҙерге ваҡытта ла күптәр хуп күрә.

Был кәсеп тураһында халыҡ ижады әҫәрҙәрендә лә телгә алына. Мәҫәлән: «Урал батыр» эпосында, халыҡ йырҙарында, әкиәттәрҙә, мәҡәлдәрҙә, йомаҡтарҙа һәм ырым-ышаныуҙарҙа. Ваҡыт үтеү менән балыҡсылыҡ кәсебенә ҡарата ғөрөф-ғәҙәттәр, ышаныуҙар, йолалар тыуған.

**Актуаллеге:**

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы балыҡсылыҡ һөнәре яйлап юғала бара. Әлеге көндә күберәк һәүәҫкәрҙәр кәсебе булараҡ ҡына билдәле. Балалар балыҡты ҡайҙа һәм ниндәй ысул менән тотоуҙарын, нисек һаҡлауҙарын белергә тейеш. Шулай уҡ Башҡортостан йылға - күлдәрендәге балыҡтарҙың төрлөлөгөн, “Ҡыҙыл китап”ҡа ингән балыҡтарҙы, хәҙерге ваҡытта балыҡ үрсетеү, һыу ятҡылыҡтары экосистемаһы тураһында аңлатыу бик мөһим, сөнки балыҡсылыҡ кәсебен юлға һалыу, хәҙерге һәм киләсәк балаларына аңлатыу, өйрәтеү беҙҙең бурыс.

**Проект төрө:** танып белеү.

**Үткәреү ваҡыты:** оҙайлы.
**Проектта ҡатнашыусылар:** балалар, ата-әсәләр, тәрбиәселәр.
**Проекттың маҡсаты:** башҡорттарҙың боронғо кәсебе балыҡсылыҡ буйынса материалдарҙы өйрәнеү, туплау, төркөмдә балыҡсылыҡ буйынса үҙәк булдырыу.
**Бурыстар:**
**Балалар өсөн:**

- һүҙ байлығын байытыу һәм фекерләү ҡеүәһен үҫтереү;
- балыҡтар, балыҡсылыҡ тураһында балаларҙың белем кимәлен киңәйтеү, үҫтереү;
- балыҡтарға ҡарата һаҡсыллыҡ тәрбиәләү;
- балыҡсылыҡ кәсебенә ҡыҙыҡһыныу уятыу;

**Ата-әсәләр өсөн**: проект эшен тормошҡа ашырыу өсөн материал туплау;
**Көтөлгән һөҙөмтә:**

- балыҡсылыҡ буйынса альбомдар, папкалар һәм слайдтар эшләү;
- төркөмдә ата – әсәләр менән берлектә мөйөш булдырыу;

**Проектты тормошҡа ашырыу планы:**
**1-се этап. Әҙерлек этабы.**

- маҡсат, бурыстар ҡуйыу;
- балыҡсылыҡ кәсебенә ҡағылған материалдар әҙерләү;
- ата – әсәләргә маҡсатты аңлатыу эштәре ;
- эш ҡоралдарын йыйыу;
- балыҡ тотоуҙың төрҙәре менән танышыу (йыл миҙгеле һәм урыны буйынса)
- балыҡсылыҡ тураһында слайдтар һәм видеояҙмалар әҙерләү;

Балалар менән эшләү:

- мәҡәл – һынамыштар өйрәнеү, йомаҡ ҡойошоу;
- әкиәттәр уҡыу;
- темаға ҡарата һүрәттәр ҡарау;
- слайдтар, видеояҙмалар ҡарау;
- балыҡ тотоу, үрсетеү буйынса әңгәмәләр үткәреү;
- халыҡ һәм квест уйындарын уйнау;

Ата – әсәләр менән бәйләнеш:

- ата – әсәләргә кәңәштәр биреү;
- балыҡсылыҡ темаһына бәйле ҡул эштәре һәм балыҡсының кәрәк - яраҡтарын әҙерләү;
- балыҡсы атайҙар менән әңгәмә;

**2-се этап. Тормошҡа ашырыу этабы. Практик өлөш.**
Балалар һәм педагогтар менән эшмәкәрлек:

| | **Тема** | **Тормошҡа ашырыу юлдары** |
|---|---|---|
| **Социаль - коммуникатив үҫеш** | | |
| 1. | “Балыҡсылар” | Сюжетлы - ролле уйын |
| 2. | “Беҙҙең йылға балыҡтарын тап”<br>“Балыҡсының эш ҡоралдары”<br>“Ҡырҡылған балыҡ һүрәтен төҙө”<br>“Балыҡ ҡармаҡлау” һ.б | Дидактик уйындар |
| 3. | “Һыу буйында үҙ – үҙеңде тота беләһеңме?” | Хәүефһеҙлек |
| 4. | “ Беҙҙең йылға – күлдәрҙәге балыҡтарҙы тап”; | Квест уйын үткәреү |
| **Телмәр үҫеше** | | |
| 1. | Мәҡәлдәр, һынамыштар, йомаҡтар, арбау – теләктәр, юрау - ырымдар | Халыҡ ижады |
| 2. | Әкиәттәр | Халыҡ ижады |
| 3. | “Ҡыҙыл китап”ҡа сәйәхәт | Ҡыҙыл китап |
| 4. | “Балыҡта” Ф. Шакир<br>“Шамбы оҙаҡ көттөрҙө” Ү.Ғәтиәтов<br>“Көмөш сабаҡ” Г.Юнысова | Шиғыр, хикәйәләр |
| **Танып белеү үҫеше** | | |
| 1. | Ҡыш көнө балыҡ тотоу<br>Йәй көнө балыҡ тотоу | Слайдтар ҡарау |

| | | |
|---|---|---|
| 2. | “Туған ҡалам тирәләй”<br>“ Картала йылға - күлдәр” | Йылға, күл, быуаларға виртуаль экскурсия |
| 3. | Беҙҙең һыуҙағы балыҡтар | Видеояҙма һәм һүрәттәр ҡарау |
| 4. | “Һыу буйында балыҡсы” | Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге |
| 5. | Балыҡтарҙың төҙөлөшө | Эҙләнеү–тикшеренеү эшмәкәрлеге |
| 6. | “Әгәр балыҡтар булмаһа” | Ситуациялы һорауҙар |
| 7. | “Алтын балыҡ”<br>“Йылан һәм балыҡ”һ.б. | “Театр” уйындары |
| 8. | “Балыҡ һәм балыҡсылар” | Виртуаль экскурсия |
| **Художестволы – эстетик үҫеш** | | |
| 1. | “Йылғыр балыҡ”<br>“Ҡыуал” | Һүрәт төшөрөү |
| 2. | “Йылғалағы балыҡтар” | Йәбештереү |
| 3. | “Балыҡтар” | Әүәләү |
| 4. | “Алабуға”Р.Сәлмәнов музыкаһы, Б.Байымов һүҙҙәре;<br>“Йәш балыҡсылар йыры” Р.Сәлмәнов музыкаһы,Ҡ.Даян һүҙҙәре;<br>“Балыҡсы йыры” Ғ.Афзал музыкаһы, Ә.Бакиров һүҙҙәре | Музыка тыңлау, өйрәнеү |
| **Физик үҫеш** | | |
| 1. | “Диңгеҙле(күлле) – балыҡлы”<br>“Йылым” | Хәрәкәтле уйындар |
| 2. | “Шаян балыҡ” | Бармаҡ уйыны |
| 3. | “Балыҡсылар” | Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге |

**Ата - әсәләр менән эшмәкәрлек:**

| | | |
|---|---|---|
| 1. | “Балыҡ һәм уны һаҡлау ысулдары” | Консультациялар |
| 2. | “Балыҡсының кәрәк - яраҡтары” | Ҡул эштәре |
| 3. | “Минең атайым балыҡсы” | Әңгәмә |

**3– сө этап. Йомғаҡлау.**

- Тупланған материалдарҙы эшкәртеү һәм тәртипкә килтереү;
- Материалдар буйынса презентация эшләү;
- Балалар, тәрбиәселәр һәм ата - әсәләр менән берлектә төркөмдә балыҡсылыҡҡа арналған үҙәк булдырыу;





